ВОСХОД
№29 (10076)
Пятница
28 июля 2023 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №7 (148)
ИЮЛЬ, 2023 ЙЫЛ

ВАҠИҒА

# ДҮРТ СИРЕК БЫУАТ ИЛЕМ ЯҘМЫШЫНДА



Яратҡол, Камышевка һәм район ветерандар советы рәйестәре Кәтибә Хәйретдинова, Лилиә Әфләтунова һәм Светлана Кондратьева.
**Валерий МЕДВЕДЕВТЫҢ Фотоһы.**

**ҺАНДАР**

**Бөгөн Рәсәйҙең**

**29**

**АУЫЛ**

**биләмәләре: Мәтәл йәки хатта беҙҙең ауылдан олораҡ тиҫтерҙәре. Шуларҙың**

**7**

**– ТӨНЬЯҠ**

**Көнбайыш һәм Волга буйы федераль округтарында,**

**5**

**– ҮҘӘК**

**һәм Урал федераль округтарында, өсәүһе – Себер федераль округында, икәүһе – Алыҫ Көнсығыш федераль округында.**

**ВАЛЕРИЙ МЕДВЕДЕВ,**
*корреспондент*

**Белем алырға, үҙеңдең үткәнеңде ҡәҙерләп һаҡларға, уны киләсәк быуынға тапшырырға тырышыу – һәр кешенең оло яуаплылығы. Һүҙ буласаҡ быуындар өсөн үҙ ғаиләңдең шәжәрәһен асыҡлау һәм һаҡлау теләге тураһында ғына бармай. Йорт, урам, тыуған яҡ – беҙҙең атайсалыбыҙ ул, шулай уҡ Бөйөк Рәсәйҙең үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ тарихы булған инеш сығанағы.**

Оло тарихы булған Ҡамышевка ауыл биләмәһенең ауыл мәҙәниәт йортонда ғына түгел, ә быйыл 425 йыллығын билдәләгән районда ла бик күңелле. Ә бер ҡатлы кирбес бинаға ингән һәр кемде хәҙерге заман йәштәренә мәғлүм булмаған боронғо атрибуттар ҡаршы ала: ҡулйыуғыс һәм боҫрап ултырған ҡуҙ самауыры. Ауыл биләмәһенең ветерандар советы рәйесе Лилиә Әфләтунова һүҙҙәренсә, ҡуҙ самауыры һәр мәтәл ғаиләһендә тиерлек бар. «Берәүҙәрҙә хатта самауырҙар икешәргә етә. Юҡ, бындай әйберҙәрҙе беҙ, ҡайһы берәүҙәрҙән айырмалы рәүештә, ташламайбыҙ», – тип йылмая Лилиә Мирза ҡыҙы. Ул клубтың китапханасыһы Зөлфиә Бикбулатова менән бергә «Мәтәл ауылы: тарих йөҙҙәрҙә» тигән тарихи-этнографик сара әҙерләп үткәрҙе.

## ИҢ ЯҠШЫ АУЫЛ

Уҡыу залына йыйылған ҡунаҡтар өсөн (ә улар 50-нән ашыу кеше килде: район үҙәгенән алып Көнсығыш Себерҙең сигенән алып) иң билдәле һәм күренекле ауылдаштарҙың яҙмышы тураһында видеофильм күрһәтелде. Уларҙың һәр береһе ваҡытында үҙенсә тыуған ауылын данланы. Мәтәл ауылының яңы быуынына ғорурланыр урындар бар.

«Беҙҙең ауыл – еребеҙҙә иң яҡшыһы. Донъяла унан башҡа яҡын, ғәзиз бер ер ҙә юҡ. Мин үҙ ауылымды яратам. Мәктәпте тамамлағас, контракт буйынса армияға хеҙмәт итергә китәсәкмен. Теләһә ниндәй дошмандан Мәтәлемде һаҡлар өсөн!». Был һүҙҙәр һигеҙенсе класс уҡыусыһы Илсур Хановтың күңел белдереүе. Сарала ул шулай уҡ ауылдаштары Дамир Яҡуповтың махсус операция зонаһында һәләк булған айҡанлы яҙылған яҡташы Юлиә Вараксинаның шиғырын да тасуири уҡып ишеттерҙе. Уның исеме, сара тамамланғандан һуң уҡ, мәңгеләштерергә тәҡдим ителде. Батыр исеме мәктәп коридорында, Хәтер таҡтаһында мәрмәрҙә, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, Динмөхәмәт Хафизов һәм үлгәндән һуң дошмандар менән һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған яугир-интернационалист, Нәғимйән Сәйетхужиндар менән бер рәткә яҙылып ҡуйыласаҡ.

Дүрт быуат эсендә бер ҡасан да һүҙ менән эштәре айырылмаған Мәтәл ауылы халҡы неонацизмға ҡаршы көрәштә һәләк булған тыуған мәктәпте тамамлаусы тураһында иҫтәлек билдәһе барлыҡҡа киләсәк, тип тулы ышаныста әйтә алабыҙ. Динмөхәмәт Сәләхужин улының бер туған ейәне – уҡытыусы, унан һуң – Мәләкәт мәктәбе директоры, КПСС-тың Арғаяш район комитеты инструкторы, бер нисә саҡырылыш район депутаттары Советы рәйесе, ә тағы ла – йылъяҙмасы һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе, Марс Әлимов. Нәҡ ауыл педагогының тырышлығы арҡаһында бик күп уникаль документтарҙың төп нөсхәләрен һаҡлап ҡалып булды. Байрамға Марсель Исмәғил улының улы, шулай уҡ уҡытыусы, спорт мәктәбе директоры Руслан килде.

## УҠЫУ ЙОРТО ҒЫНА ТҮГЕЛ

«Мин бындай ихтирамға ысын күңелдән шатмын. Атайым менән олатайымдың, бөтә Хафизовтар ғаиләһенең, башҡа данлыҡлы Мәтәл кешеләренең яҡты иҫтәлегенә тоғро буласаҡмын. Бындай ғәйәт ҙур эш башҡарылған һәм ошо үҙенсәлекле тарихи мираҫты һаҡлау өсөн әле лә әүҙемлек күрһәтелә», – билдәләне Руслан Марс улы. Мәтәл китапханаһы – ул китап уҡыу йорто, уҡыусылар һәм студенттар өсөн Интернетҡа бушлай инеү урыны ғына түгел. Яңы быуынды патриотик рухта тәрбиәләү үҙәге лә! Бында төрлө сәбәптәр буйынса: шатлыҡ һәм ҡайғы кисергәндә лә йыйылалар. Уҡыу залы күптәнән инде халыҡ оҫталары-етәкселәренең мәнфәғәттәре буйынса осрашыу урынына әүерелде һәм йәмғиәт тормошондағы иң мөһим темаларҙы тикшереү ҡоро ла булды. Элекке йылдарҙа уҡ һалынған төрлө быуын ауылдаштарын бер ҡыйыҡ аҫтында берләштереүҙе быйылғы китапханасы Зөлфиә Бикбулатова оло теләк менән дауам итә. Байрамға Наталья Пыхтина етәкселегендәге Арғаяш үҙәкләштерелгән китапханаһы хеҙмәткәрҙәренең бер делегацияһы килгәнгә, мин унан хеҙмәткәрен баһалауҙы һораша алмай ҡалманым. «Һеҙ үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп тораһығыҙ бит: татарихи периодтар буйынса, ана, күпме материалдар тупланған. Уның эш тәжрибәһен башҡа китапхана филиалдарында ла ҡулланасаҡбыҙ», – тип белдерҙе мөдир.

Был сараны уҙғарыуға ауыл ветерандары ла ихлас ҡушылды. Айырыуса Рәмилә Әйүповаға рәхмәтлебеҙ. Рәмилә Хабрахман ҡыҙы 25 йыл буйына ауыл клубын етәкләне, үткәргән бик күп уҙғарған сараларын әле булһа яҡшы иҫләйҙәр. Клуб мөдире, ауыл биләмәһе ветерандары советы рәйесе һәм байрамға әҙерләнеү һәм уны үткәреүгә ҡағылышы булған китапханасы район ветерандар советы рәйесе Светлана Кондратьеваның рәхмәт хаттары менән бүләкләнде. Район башлығының социаль сәйәсәт буйынса урынбаҫары Гөлнара Мусина ла йомғаҡ яһаны: «Мәтәл ауылы артабан йәшәргә генә түгел – ул үҫергә, үҫешергә, киләсәккә пландар төҙөргә, матди ғына түгел, рухи, әхлаҡи йәһәттән байырға тейеш. Беҙҙең барыбыҙға ла ата-бабалар рухына тоғро ҡалыуҙы, халыҡ тарихын һаҡлауҙы һәм ошо мираҫты киләсәк быуынға нисек тапшырыуҙы һеҙҙән өйрәнергә кәрәк».

**ҺАНДАР**

**3**

**АУЫЛДАШЫБЫҘ,**

**мәктәпте тамамлағас, Мәскәүгә, Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға тиклем уҡырға киттеләр: тарих фәндәре кандидаты һәм ете монография авторы Рамазан Ҡуҙыев, Өфө дәүләт медицина институтының буласаҡ ректоры Зәйнулла Иҡсанов һәм ашҡортостандың беренсе ҡатын-ҡыҙ-хирургы Медицина хеҙмәте капитаны Мәрхәбә Хафизова.**

ТАРИХ

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ

**Рәсәй төбәктәрендә халыҡ мәҙәниәтен һаҡлау нигеҙе башҡорт этник кейемен реконструкциялауҙың төрлө йүнәлештәре, милли кейем тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәренең актуаллеге, ҙур һорау менән файҙаланған атрибутикаларға барып тоташа.**

Силәбе, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Ҡурған өлкәләре, Пермь крайы һәм Татарстан Республикаһы башҡорттары ошо урындарҙың төп халҡы булып тора. Донъяла 2 миллиондан ашыу башҡорт йәшәй. Шуларҙың 1 584 554-е Рәсәйҙең төрлө субъекттарында йәшәй. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереүҙең йоғонтоло ысулдарының береһе тип ҡыйыу рәүештә башҡорт милли кейемдәрен өйрәнеүҙе атарға мөмкин. Милли кейем – ул ябай кейем-һалым ғына түгел, ул – халҡыбыҙҙың мәҙәниәте һәм тарихы ла, уның традициялары һәм йәшәү рәүеше лә. Ул халыҡтың мәҙәни-рухи мираҫын һаҡларға ярҙам итә. Был тема йәштәргә лә, өлкән быуынға ла ҡыҙыҡлы. Милли кейем тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәреү, атрибутика элементтары ҙур һорау менән файҙаланыла. Был эшмәкәрлекте бизнесҡа әйләндереү мөмкинлеге лә бар. Силәбе өлкәһендә Занилиә Ғәлиеваның «Тирмә» ижад оҫтаханаһы бар. Проект 2017 йылдан алып эшләй. Оҫта төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының милли кейемен тергеҙеүгә айырым иғтибар бирә. Занилә Ғәлиева, балалар һәм өлкәндәр араһында милли кейем тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойоштороп, үҙ белеме менән уртаҡлаша. Ул бер туҡтауһыҙ былай тип ҡабатлай: «Ата - әсәйем, өләсәйем мине үҙ тамырҙарыма ҙур һөйөү уятҡан. Бала сағымдан уҡ тегергә яраттым.

Башҡорттарҙың милли кейемен тергеҙеүҙән тыш, мин тағы ла мин боронғо йыһаздар ҙа йыям. Минең һандыҡ, көйәнтә, ағас һауыт-һабам, еп иләү станогым бар». Милли кейемде үҫтереү өлкәһендәге тағы бер уңышлы проекттан «Милли кейем»де атарға мөмкин. Проект авторы – Силәбенән Гөлнара Вәхитова. Традицион кейем реконструкторы Башҡортостан халыҡтарының милли кейемдәрен тергеҙеү менән шөғөлләнә. Был уға Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә оҫталыҡ дәрестәрен уңышлы үткәрергә ярҙам итә. Мәҫәлән, «Ата-баба ауазы» проекты сиктәрендә Пермь крайында Гөлнара Вәхитова ғәйнә башҡорттарының костюмдары тураһында лекциялар үткәрҙе. Уның күп быуаттар дауамында башҡорттар менән урыҫ халҡының дуҫлыҡта һәм татыулыҡта йәшәгән ғөрөф-ғәҙәттәре, үҙенсәлектәре тураһында белеүе сығышы йөкмәткеһенең тәрәнлеген бирҙе. Пермь крайының Көйәҙе ҡасабаһы Башҡортостан менән сиктәш. Бында Гөлнара Вәхитова башҡорттарҙың ирәкте, танып һәм ғәйнә ырыуҙарының кейемдәренә баҫым яһай. Чернушка ҡалаһы башҡорттары ғәйнә башҡорттары костюмдарынан дефиле үткәрә.

Һамар өлкәһенең Похвистневский районы Әлкәгә «Ата-бабаларыбыҙ ауазы» проекты командаһы менән килгәндә, оҫтабикә Рәйлә Сабитованы үҙебеҙгә йәлеп иттек. Ул ошо ауылда тыуып үҫкән. Рәйлә Сабитова музейҙа урынлашҡан күргәҙмә материалдар буйынса кейем тегеү серҙәренә төшөндө, сөнки биҙәнеү әйберҙәре һәм боронғо кейемдәр өлгөһө бик аҙ һаҡланған. Бында ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары йәшәй. Свердловск өлкәһендә уҙған оҫталыҡ дәресе халыҡ араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Аудиторияла 74 милләт вәкилдәренең балалары булды.

Был үҙенсәлекте иҫәпкә алып, оҫтабикә башҡорттарҙың сәхнә костюмы хаҡында ла һөйләне. Балалар иҫтәлеккә милли кейемдәрҙә фотоға төшә, уларҙы үҙ ҡулдарында тотоп ҡарай алды. Рәйлә Сабитова сағыштырыу өсөн ҡурсаҡтарын төньяҡ-көнсығыш башҡорттары кейемендә күрһәтте. Сарала башҡорт биҙәүестәрен һатыу ойошторолдо. Башҡортостанда иғлан ителгән Милли кейем көнө Рәсәй төбәктәрендә лә киң билдәләнә. Ошо ваҡиға уңайынан оҫталыҡ дәрестәре, флешмобтар, түңәрәк өҫтәлдәр, конференциялар уҙғарыла.



*Арғаяш башҡорттары үҙ тамырҙарын хөрмәт итә.*
**Абдулвәлиевтар ғаиләһе архивынан фото.**

Мәҫәлән, Салауат Юлаевтың тыуған көнөнә арналған «Рәсәй төбәктәрендә Салауат эҙе» сараһы сиктәрендә флешмоб уҙҙы: Рәсәйҙең алты төбәгенән башҡорттар милли кейемдә Салауат Юлаевтың башҡорт телендә яҙылған шиғырҙарын һөйләне. Проектҡа башҡа милләт вәкилдәре лә ҙур теләк менән ҡушылды. Улар ҙа милли кейемендә сығыш яһаны.

Йәрминкәләрҙә, башҡорт кейеме менән бәйле күргәҙмәләрҙә ҡатнашыу башҡорттарҙың мәҙәниәтен киң күләмдә үҫтереүгә булышлыҡ итә. Һәр халыҡ үҙ йолалары менән көслө. Милли кейем донъя мәҙәниәте һәм тарихының мөһим һәм ҡыҙыҡлы өлөшө, халыҡ мәҙәниәтенең сағыу элементы һәм биҙәү ижадының төрлө берләшмәһе булыуы сер түгел. Тап ошо үҙенсәлектәр бөгөн милли кейемебеҙҙе, боронғо ҡомартҡыларыбыҙҙы яңыртыуҙа көнүҙәк тема булып тора ла инде.

**Нурия ИҠСАНОВА,**
*этножурналист.*

ЯҢЫЛЫҠТАР

## Туғыҙбайҙа – Арыҫлан

**«Тамыр» этно-комплексында йыл һайын уҡтан атыу буйынса «Ҡырыҫ уҡсы» турниры ойошторола.**

29-30 июлдә беҙҙең өлкә һәм күрше төбәктәр уҡсылары ғәҙәти (тарихи) уҡтан атыуҙа ярыша. Ҡатнашыусыларҙың йәше: 7 йәштән алып. Сара асыҡ һауала үтә, ике көн дауамында бара. Ҡатнашыусылар өсөн кемпинг биләмәһе бүленгән, һеҙ унда палаткаларҙа, тирмәләрҙә, тәгәрмәс-өйҙәрҙә урынлаша алаһығыҙ. Сараны ойоштороусылар булып Силәбе өлкәһенең «Арыҫлан» милли халыҡ-ара олимпия уйындарына индерелмәгән спорт төрҙәре федерацияһы, Силәбе өлкәһендәге традицион уҡтан атыу буйынса «Ҡырыҫ уҡсы» ойошмаһы сығыш яһай. Ярыштарға тамашасыларға ла барырға мөмкин! Барыһын да саҡырабыҙ!

## Ишәлеләр һәм абдырҙар мәсет төҙөй

**Рәсәй Федерацияһында выждан ирке һәм дин тотоу ирке, шул иҫәптән яңғыҙ йәки башҡалар менән берлектә теләгән бер динде тотоу йәки береһен дә тотмау, дини йолаларҙы һәм тантаналарҙы башҡарыу, динде һәм дини тәрбиә биреүҙе уҡытыу хоҡуғы гарантиялана.**

Ислам диненең маҡсаты – ул сәләмәт, намыҫлы, бәхетле ғаилә ҡороусы һәм һау йәмғиәттең уның бер өлөшө булырға ынтылған кеше. Мосолман халыҡтарының күп йылдар дауамында формалашҡан үҙҙәренең ғөрөф-ғәҙәттәре һәм үҙҙәренә хас йолалары бар. Һәр йома һайын мәсеткә барыу йолаларҙың береһе булып тора. Ауылда мәсет булмаһа, ни эшләргә?

Мин район депутаты булған Ишәле һәм Абдыр ауылы халҡы, был мәсьәләнең бөтә нескәлектәрен өйрәнә килә, мәсет төҙөлөшөн башларға булдылар һәм йолаларҙы теүәл үтәнеләр: Ҡорбан байрамы көндәрендә буласаҡ мәсет урынында аят үткәрҙеәләр, уларҙың береһендә мин ҙур ҡәнәғәтлек менән ҡатнаштым. Арғаяш районы депутаттары Йыйылышында депутат, «Берҙәм Рәсәй» партияһы фракцияһы етәксеһе булараҡ, мәсет әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, дини ҡиммәттәрҙе тергеҙеүгә булышлыҡ итер, шулай уҡ күңел йылыһы, тыныслыҡ һәм мәрхәмәтлелек сығанағы булыр, тип иҫәпләйем. Мәсет төҙөлөшө менән беҙҙең мәктәпте тамамлаусыларҙың ҡыҙыҡһыныуы, был мәсьәләнең мөһимлеген һәм етдилеген аңлауы мине ҡыуандыра, сөнки мәсет – ул бер эш, ә һуңынан уны тәртиптә тоторға кәрәк буласаҡ. Йәштәр быны аңлай һәм төшөнә!

**Люция ЙОСОПОВА.**

Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәҡәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ:
Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.